*Марат ЗӘЙНУЛЛИН,*
*филология фәндәре докторы*

# Арҙаҡлы ғалим, күренекле яҙыусы

Күренекле башҡорт тел ғалимы һәм тюрколог, билдәле яҙыусы һәм тәржемәсе Әкрәм Бейешев 1926 йылдың 16 апрелендә Күгәрсен районының Туйөмбәт (Байулы) ауылында тыуған. Уның атаһы Ғибаҙулла Абдулла улы Бейешев (1898—1979) — күренекле уҡытыусы. Ул үҙенең 40 йылға яҡын педагогик эшмәкәрлеге менән районда мәғарифты үҫтереүгә ҙур хеҙмәт һалған шәхес. Хаҡлы ялға сыҡҡас, мәғарифтың һәм мәҙәниәттең төрлө мәсьәләләренә арналған мәҡәләләр, иҫтәлектәр менән эленән-әле сығыш яһап торҙо.

Бейешевтар Күгәрсен районында һәм республикала ғына түгел, бөтә илгә билдәле заттар. Ғибаҙулла Абдулла улының ғаиләһендә бынамын тигән улдар һәм ҡыҙҙар үҫкән. Оло улы Фуат ҡойоп ҡуйған журналист, оҙаҡ йылдар республиканың төрлө гәзит һәм журнал редакцияларында, һуңыраҡ Башҡортостан радио һәм телевидениеһында өлкән редактор булып эшләне.

Әсғәт Бейешев нефть сәнәғәтен үҫтереү өсөн күп көс һалған шәхес булды, техник фәндәр кандидаты ине. Билдәле уҡытыусылар һәм ижтимағи эшмәкәрҙәр Ләлә һәм Рауза Бейешевалар тыуған ере Башҡортостандың мәҙәниәтен артабан үҫтереү өсөн арымай-талмай хеҙмәт иткән зыялылар.

Ғибаҙулла Абдулла улының бер туған һеңлеһе, халыҡ яҙыусыһы, Салауат Юлаев исемендәге республика премияһы лауреаты Зәйнәб Биишева — әҙәбиәтебеҙҙең мәшһүр классигы. Уның әҫәрҙәре Рәсәй һәм донъя халыҡтарының күп телдәренә тәржемә ителгән. Зәйнәб апай менән Ғәзиз ағай бына тигән өс ул тәрбиәләп үҫтергән. Оло улдары Тельман Мәскәү дәүләт университетының химия факультетын тамамлаған, химия фәндәре кандидаты, Мәскәүҙә йәшәй. Икенсе улдары Юлай шулай уҡ Мәскәү дәүләт университетының математика факультетын тамамлаған. Әсәһе Зәйнәб Биишева әҫәрҙәрен рус теленә тәржемә итеү менән шөғөлләнә. Башҡортостан Яҙыусылар союзы ағзаһы, Мәскәүҙә йәшәй. Кесе улдары Дарвин Өфө дәүләт медицина институтын тамамлаған, Өфөлә эшләй.

Зәйнәб Абдулла ҡыҙының бер туған апаһы — Ҡорбанаева Хәлимә Абдулла ҡыҙы оҙаҡ йылдар данлыҡлы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булды. Ул 1948 йылда СССР Юғары Советы депутаты итеп һайланды. Уның педагогик эшмәкәрлеге илебеҙ тарафынан юғары баһаланды — ”Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған уҡытыусыһы” тигән маҡтаулы исем бирелде, Ленин ордены менән бүләкләнде. Ҡыҙы Флүрә Шәйхи ҡыҙы — медицина фәндәре докторы, профессор.

Әкрәм Бейешев 1956 йылда Мәскәү дәүләт университеты филология факультетын тамамлағас, Өфө Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтына ғилми хеҙмәткәр вазифаһында эшкә килә. Ул университетта тюркология буйынса нигеҙле белем ала, был ваҡытта төрки телдәре бүлегендә атаҡлы тюркологтар — профессор Н.К.Дмитриев, Э.Н.Нәжиб, В.М.Насилов, Ш.С.Айляров, Э.А.Грунина һәм башҡа күренекле ғалимдар эшләй.

Ә.Бейешев 1958—1961 йылдарҙа СССР Фәндәр академияһы Тел ғилеме институтының аспирантураһында уҡый. Уның ғилми етәксеһе күренекле ғалим-тюрколог Э.В.Севортян була. Эрванд Владимировичтың тәҡдиме буйынса ”Төрки телдәрендә беренсел оҙон һуҙынҡылар” проблемаһына арналған кандидатлыҡ диссертацияһы яҙып, уны уңышлы яҡлай. Был хеҙмәт 1963 йылда Өфөлә ”Первичные долгие гласные в тюркских языках” исемендә айырым монография булып донъя күрә. Был монографияла Ә.Бейешев төрки телдәрендә оҙон һуҙынҡыларҙы башҡорт теленең һуҙынҡы өндәре менән сағыштырыу нигеҙендә был телдәрҙең фонетик системаһының тәбиғәтен, шулай уҡ тарихи үҫешен тикшергән. Был хеҙмәт тюркологтар араһында ҙур абруй менән файҙалана.

Институтта эшләй башлағас та, Әкрәм Бейешев үҙенең төп маҡсаты итеп башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеген төҙөү бурысын ҡуя. 1964 йылда ул ”Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеге”н төҙөү өсөн ҡулланма баҫтыра, был ҡулланма кәрәкле өҫтәмәләр менән тулыландырыла һәм 1966 йылда яңынан донъя күрә. Ҡулланмала башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеген төҙөү өсөн беренсе сиратта туған телдең һүҙ байлығын туплау хаҡында әйтелә. Һүҙлек төҙөүҙә ҡатнашыусы ғилми хеҙмәткәрҙәр коллективының етәксеһе булараҡ, Ә.Бейешев һүҙлек өсөн картотека йыйнау бурысын ҡуя һәм ең һыҙғанып эшкә тотона. Ахыр сиктә, бер миллиондан ашыу лексик берәмек һәм фразеологик һүҙбәйләнештәрҙән торған картотека барлыҡҡа килә. Әлбиттә, төрлө сығанаҡтарҙан һүҙ йыйыу еңел эш түгел. Һүҙлек төҙөү — энә менән ҡойо ҡаҙыу, тиҙәр. Һүҙ йыйыусы белгес һүҙҙең төп һәм өҫтәмә мәғәнәләрен сағылдырған миҫалдар табырға тейеш. Һүҙлекте төҙөүгә әҙерлек эше ул баҫылып сыҡҡанға тиклем 30 йыл элек башлана. Ниһайәт, 1993 йылда Мәскәүҙә ”Башҡорт теленең һүҙлеге” ике томда донъя күрә. Был, әлбиттә, башҡорт фәнендә һәм мәҙәниәтендә ҙур тарихи ваҡиға булды. Аңлатмалы һәм энциклопедик һүҙлектәрҙең әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ. Ә.Бейешев етәкселегендә был һүҙлекте төҙөүселәр сикһеҙ ҡатмарлы эште намыҫ менән үтәп сыға. Уларҙың эшен ҡаһарманлыҡ тип билдәләргә кәрәк. Әлбиттә, һүҙлектең донъя күреүендә Ә.Бейешевтың роле ифрат ҙур

булды һәм һүҙлек ғалимдарҙың, уҡытыусыларҙың, студенттарҙың өҫтәл китабына әйләнде.

Һүҙлек өҫтөндә эшләү менән бер рәттән, 80-се йылдар башында Ә.Бейешев тел ғилеменең мөһим проблемаларына арналған мәҡәләләр яҙа, ғилми конференцияларҙа сығыш яһай. Мәҫәлән, 1971 йылда Ленинградта ”Алтай телдәренең ҡәрҙәшлеге проблемаһы” буйынса конференция материалдарынан төҙөлгән йыйынтыҡ баҫылып сыға. Был йыйынтыҡта Ә.Бейешевтың ике мәҡәләһе баҫыла: ”Тағы ла бер тапҡыр ”башҡорт” этнонимы хаҡында” һәм ”Төрки телдәрендә *-ды* ялғаулы үткән заман формаларының килеп сығышы тураһында”. Был мәҡәләләрҙә төрки тел ғилемендә күп тапҡырҙар тикшерелгән мәсьәләләр хаҡында һүҙ бара. Ысынлап та, был ике проблема буйынса ғалимдар төрлө гипотезалар һәм фекерҙәр әйткән. Мәҫәлән, ”башҡорт” һүҙенең этимологияһы һәм килеп сығышы хаҡында утыҙҙан ашыу гипотеза бар (Н.А.Баскаков, В.И.Филоненко, В.С.Юматов, Н.В.Бикбулатов, Т.М.Ғарипов, Р.Ғ.Кузеев һ.б.).

Был хаҡта айырыуса ике ҡараш киң таралған: 1) бер төркөм ғалимдар ”башҡорт” һүҙе тарихи планда баш (башлыҡ) һәм ҡорт (бал ҡорто) элементтарынан төҙөлгән тип ҡарай; 2) икенселәре ”башҡорт” һүҙендәге ”ҡорт” элементы ”бүре” мәғәнәһен белдерә тип фараз итә, йәғни башҡорт һүҙен ”баш бүре, бүре — өйөр башлығы” тип аңлаталар. Ә.Бейешев ”башҡорт” этнонимын түбәндәгесә аңлата: ”башҡорт этнонимы өс элементтан тора: баш-ҡор-т. Бында *баш* һүҙе башлап йөрөүсене, *ҡор* һүҙе халыҡ, йыйын мәғәнәләрен белдерә, ә *т* элементы урал-алтай телдәрендә күплек идеяһын бирә, йәғни башҡорт этнонимының этимологик йөкмәткеһен, мәғәнәһен Ә.Бейешев *башлап барыусы* тип аңлата.

Был йылдарҙа Ә.Бейешев башҡорт теленең һәм башҡа төрки телдәренең грамматик һәм фонетик төҙөлөшөнә арналған бер нисә ғилми мәҡәлә яҙа. Мәҫәлән, Алматыла уйғыр теле проблемаларына бағышланған йыйынтыҡта алтай телдәрендә *-р/-ҙ* өндәренең тап килеше хаҡында баҫылған мәҡәләһе тюркологтарҙа ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. 1972 йылда Мәскәүҙә төрки телдәренең алфавиттарын камиллаштырыу буйынса ”Вопросы совершенствования алфавитов тюркских языков СССР” мәсьәләһенә арналған бик әһәмиәтле ғилми-ғәмәли конференция үткәрелә. Унда Ә.Бейешев башҡорт алфавиты хаҡында йөкмәткеле доклад менән сығыш яһаны. 1973 йылда ул башҡорт теленең орфографияһына арналған бер нисә мәҡәлә баҫтыра. Был йылдарҙа стилистика мәсьәләләре менән дә әүҙем шөғөлләнә.

Хаҡлы ялда булһа ла, ул ижади эшен әүҙем дауам итә. 1999 йылда Башҡортостан ”Китап” нәшриәтендә ”Тел хикмәттәре” исемле хеҙмәте донъя күрҙе. Унда һүҙ бөгөнгө башҡорт әҙәби телендә нығынған ҙур етешһеҙлектәр хаҡында бара. Автор фекеренсә, әҙәби яҙма телде ғилми нигеҙҙә тәртипкә килтереү, тейешенсә ҡанунлаштырыу буйынса алда бик ҙур эш тора, сөнки хәҙерге көндә әҙәби телдең төрлө шарттарҙа ҡулланылышында бик күп хаталар осрай. Бер нисә миҫал килтерәйек,

китаптың авторы башҡорт телендә күплек ялғауының ни рәүешле дөрөҫ ҡулланылыуы хаҡында бик төплө һәм нигеҙле дәлилдәр килтереп, уларҙы күп һанлы миҫалдар менән нығытҡан. Унынса, хәҙерге яҙма телдә лә, һөйләү телендә *-лар* күплек ялғауын бөтә исемдәргә ҡушып яҙалар һәм һөйләйҙәр. Мәҫәлән, һыуҙы *малдарға* ташып эсерергә тейешбеҙ. Был китапта *балалар* тураһында яҙылған. *Мал-тыуарҙар* һаны кәмеүгә китте. Был өс һөйләмдәге *малдарға, балалар, мал-тыуарҙар* исемдәре башҡорт теле һүҙлегенән берлек һанда торорға тейеш, сөнки был һүҙҙәр берлектә лә күплек төшөнсәһен белдерә. Китапта төрки тел ғилемендә изафет тип йөрөтөлгән грамматик күренешкә ҙур иғтибар бирелгән. Билдәле булыуынса, башҡорт телендә башҡа төрки телдәрендәгесә изафет һүҙбәйләнештәре яңы һүҙ яһау сараһы һанала. Мәҫәлән, бал ҡорто (пчела) — башҡорт телендә үҙаллы семантикаһы булған лексик берәмек. Ындай күренеш башҡорт телендә киң таралған. Әммә улар беҙҙең башҡорт һүҙлектәрендә айырым һүҙ итеп алынмаған. Исем ҡылымдар менән дә эш шулай тора. Бик күп исем ҡылымдар (йылмайыу, көнләшеү, хушлашыу, юғалтыу, хәтерләү, һағыныу, осрашыу, ҡурҡыу һ.б.) бөтөнләй исем һүҙ төркөмөнә күскән, шулай ҙа улар һүҙлектәрҙә үҙаллы лексема итеп бирелмәгән. Был, әлбиттә, һүҙлектәрҙә һүҙҙәрҙең күпкә кәмеүенә килтерә.

Хеҙмәттең "Һүҙ һәм һүҙ ҡулланылышы" бүлегендә автор бик мөһим мәсьәләләр ҡуҙғата, айырым һүҙҙәрҙең дөрөҫ ҡулланылмауына төплө анализ яһай. Был йәһәттән *сәнәғәт, аңламаусанлыҡ, аңлашылмаусанлыҡ, ауыҙ-тел ижады, малай, сит ил теле, тынсыу, үҙемде белгәндән бирле, юлланыу* һәм башҡа бик күп һүҙҙәрҙең яһалма булыуы һәм дөрөҫ ҡулланылмауы нигеҙле иҫбат ителгән. Автор фекеренсә, телде ныҡ боҙған бындай күренеш яҙма телгә генә түгел, ғөмүмән, башҡорт теленә ҙур зыян килтерә.

Китапта "Килеш менән бәйләүес", "Сифат менән рәүеш", "Һүҙ яйы һәм һөйләм ҡоролошо", "Ҡылымдың ҡайтым һәм төшөм йүнәлештәре", "Хәҙерге заман сифат ҡылым", "Дәүләт һәм халыҡ атамалары" исемле мәҡәләләре теоретик планда ла, практик стилистика күҙлегенән дә бик уңышлы яҙылған. Йомғаҡлап әйткәндә, авторҙың был китабын ҙур ҡәнәғәтләнеү менән уҡып сыҡҡас, уны уҡытыусылар, студенттар, мәктәп уҡытыусылары, журналистар һәм туған телдә яҙышҡан һәр кем өсөн файҙалы һәм ҡиммәтле әсбап тип билдәләргә кәрәк.

Ә.Бейешевтың 1993 йылда "Башҡорт халҡының тарихы һәм азатлыҡ көрәше", 1995 йылда "Нация и ленинская национальная политика" исеме менән сыҡҡан китаптары уның үткер политолог булыуына бер дәлил. 2003 йылда донъя күргән "Эйек бөрйәндәре һәм Туйөмбәт менән Ҡотломбәт" тигән хеҙмәттәре Әкрәм ағайҙың тарихты ентекләп өйрәнеүен күрһәтеп тора. 2002 йылда "Көл аҫтындағы ҡуҙ" исеме менән донъя күргән шиғырҙар һәм хикәйәләр йыйынтығында Әкрәм Бейештең тағы бер һәләте ярылып ята: ул арҙаҡлы ғалим ғына түгел, талантлы яҙыусы ла. Шуны әйтергә кәрәк, Әкрәм ағай Бейешевтың ижады хаҡлы ялға киткәс айырыуса әүҙемләште.

2002 йылда ”Ағиҙел” журналында уның ҙур күләмле ”Ил аҙабы” исемле романы ҡыҫҡартылып донъя күрҙе. Был романды уҡығанда Әкрәм ағайҙың ябай халыҡ теленең байлығын оҫта ҡуллана белеүе таң ҡалдыра.

Мәҡәләне яҙыу мәлендә мин Әкрәм Ғибаҙулла улының 2002 йылда нәшер ителгән ”Көл аҫтындағы ҡуҙ” китабын яңынан уҡып сыҡтым. Китаптың, унда бирелгән шиғырҙарҙың, сәсмә әҫәрҙәрҙең төп йөкмәткеһе тыуған илгә, туған телгә булған тәрән, эскерһеҙ һөйөү, тыуған илдән, туған телдән башҡа йәшәүҙең мәғәнәһеҙ булыуын һүрәтләүгә ҡайтып ҡала. Ул ҙур оҫталыҡ, үҙенсәлекле поэтик саралар менән халҡына булған ҡарашын асып биргән. Бер нисә миҫал килтерәйек:

Халҡым минең, йөрәк ҡаным минең,
Зарым минең, йырым һин минең.
Һин булмаһаң, ни тип йәшәр инем,
Нимәм ҡалыр ине һуң минең?

Телен һөймәҫ, эшен һөймәҫ кеше
Илен һөймәҫ, һөйә бер үҙен.
Ни ҡыҙығын таба икән, меҫкен,
Йән аҫрап ҡына йөрөүҙең.

Әсәйемде әсәй, илемде ил,
Үҙемде ир иткән — һин, телем,
Эйелмәҫ баш, тына белмәҫ йөрәк,
Йәшәр теләк биргән — һин, телем.

Күренекле ғалим, башҡорт халҡының арҙаҡлы улы Әкрәм Бейешев беҙҙең арала юҡ инде. Ул үҙенең бер шиғырында: ”Пушкин бөйөк, унан һәйкәл ҡалған, Һәйкәл һалыу минән булманы”, — тип яҙғайны. Әммә ул үҙенең ғилми эшмәкәрлеге, хеҙмәттәре менән үҙенә мәңгелек һәйкәл һалып ҡалдырҙы. Әкрәм Бейешев сирек быуат ғүмерен биргән бер һүҙлеге менән дә халҡыбыҙҙың быуаттар буйы йыйған рухи байлығын киләсәк быуынға тапшырыу бурысын үтәп китте был донъянан.

Тынғыһыҙ ғалим Әкрәм Бейешев бөтә ғүмере буйына әүҙем ижад итте. Уның тормош һәм ижад юлы, тыуған иленә, туған теленә һөйөүе, уларҙы ҡурсалап йәшәүе һәр кем өсөн өлгө булырлыҡ. Беҙҙең бурыс — Әкрәм Ғибаҙулла улы Бейешевтың яҙған хеҙмәттәрен тиҙ арала барлап, баҫып сығарыу сараһын күреүгә ҡайтып ҡала.

Мәҡәләнең аҙағында шуны әйтергә теләйем: ”Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеге”нең яңы баҫмаһын әҙерләргә кәрәк, сөнки, беренсенән, бынан 13 йыл элек был һүҙлек бик әҙ тираж менән баҫылып сыҡты, икенсенән, уның полиграфик сифаты бик түбән, өсөнсөнән, беренсе баҫмалағы етешһеҙлектәрҙе иҫәпкә алып, һүҙлекте байтаҡ тулыландырырға мөмкин булыр ине.